РАҪЛАЙЫМ
Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы
Президиумы рәйесе
________________Э.Р. Айытҡолова
«14» ғинуар 2020 йыл

**Башҡорт теле йылы сиктәрендә**
**уҙғарылған сараларҙы тормошҡа ашырыу буйынса методик күрһәтмәләр**

## 1. Дөйөм положение

1.1. «Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы (конгресы)» йәмәғәт ойошмаларының халыҡ-ара берлегенең Башҡорт теле йылын үткәреү тураһындағы инициативаһы (артабан-Инициатива) Башҡортостан Республикаһы Башлығы Р.Ф.Хәбиров тарафынан хуплау тапты һәм Башҡортостан Республикаһында, Рәсәй Федерацияһының башҡорттар күпләп йәшәгән субъекттарында бойомға ашырыла.

1.2. Инициативаның төп маҡсаты – башҡорт телен популярлаштырыу, республикала һәм башҡорттар күпләп йәшәгән төбәктәрҙә уны уҡытыу шарттарын яҡшыртыу, шулай уҡ Башҡортостан Республикаһында башҡорт теленең дәүләт теле булараҡ ҡулланыу даирәһен киңәйтеү.

1.3. Инициативаның бурыстары:

- Инициативаны үткәреү буйынса ойоштороу комитеты булдырыу, шулай уҡ территориаль берәмектәрҙә сараларҙы тормошҡа ашырыу буйынса командалар туплау (район, ҡала, РФ субъекты һәм башҡалар);
- территориаль берәмектәрҙә Башҡорт теле йылы тураһында Положение, уның сиктәрендә тормошҡа ашырыласаҡ саралар планын төҙөү һәм раҫлау (район, ҡала, РФ субъекты һәм башҡалар);
- заманса методик ҡулланма әҙерләү һәм уның нигеҙендә башҡорт телен үҙ аллы, шул иҫәптән экспресс-өйрәнеү буйынса төрлө йәштәгеләр өсөн әсбаптар булдырыу;
- территориаль берәмектәрҙә яңы мәҙәни һәм белем биреү мәғариф майҙансыҡтары булдырыу һәм булғандарын үҫтереү (район, ҡала, РФ субъекты һәм башҡалар);
- Башҡортостан Республикаһында һәм башҡа төбәктәрҙә башҡорт мәҙәниәтен һаҡлау һәм үҫтереү, уны популярлаштырыу;
- башҡорт телен дәүләт теле булараҡ популярлаштырыу, уның төрлө сараларҙы тормошҡа ашырыу сиктәрендә ҡулланыу даирәһен киңәйтеү;
- Инициативаны тормошҡа ашырыуға әүҙем граждандарҙы, муниципаль һәм дәүләт хеҙмәткәрҙәрен, йәмәғәт эшмәкәрҙәрен һәм башҡа билдәле шәхестәрҙе йәлеп итеү;
- балалар баҡсаларында һәм мәктәптәрҙә белем биреү процесын оптималләштереү, башҡорт телен туған тел булараҡ йәштәр, балалар һәм ата-әсәләр араһында популярлаштырыу, шулай уҡ башҡорт телен уҡытыу буйынса башҡа төрлө майҙансыҡтар булдырыу;

- халыҡ педагогикаһы нигеҙендә территориаль (ауыл, район, ҡала) халыҡ йолаларын, уҡытыу һәм тәрбиә биреү традицияларын тергеҙеү;
- Башҡорт теле йылы сиктәрендә проектты һөҙөмтәле тормошҡа ашырыу буйынса район һәм ҡала ҡоролтайҙары араһында конкурс үткәреү.

## 2. Башҡорт теле йылын үткәреү этаптары һәм ваҡыты

2.1. Башҡорт теле йылы 2020 йылдың ғинуарынан алып декабргә тиклем үткәрелә.

2.2. Башҡорт теле йылына 2020 йылдың 14 декабрендә йомғаҡ яһала.

## 3. Ойоштороусылар һәм эш органдары

3.1. Башҡорт теле йылы сиктәрендә ойошторолған сараларҙың координаторы һәм консультанты булып «Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы (конгресы)» йәмәғәт ойошмаларының халыҡ-ара берлеге тора.

3.2. Башҡорт теле йылын ойоштороусылар – «Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы (конгресы)» йәмәғәт ойошмаларының халыҡ-ара берлеге, Башҡортостан Республикаһы Башлығы Хакимиәте, Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте, муниципаль район һәм ҡала округтары хакимиәттәре, территориаль ҡоролтайҙар, башҡа йәмәғәт ойошмалары, ижади берләшмәләр.

3.3. Башҡорт теле йылы сиктәрендәге сараларҙы тормошҡа ашырыу өсөн Башҡортостан Республикаһының муниципаль районлары һәм ҡала округтары хакимиәте ҡарамағында ойоштороу комитеты төҙөргә, Башҡорт теле йылын үткәреү, уның маҡсаттарын һәм бурыстарын аңлатыу тураһында Положение әҙерләргә тәҡдим ителә.

3.4. Башҡорт теле йылын ойоштороу һәм үткәреү өсөн территориаль берәмектәрҙә муниципаль район һәм ҡала округы хакимиәттәре, территориаль ҡоролтайҙар яуаплы.

3.5. Территорияларҙа үткәрелгән саралар тураһында мәғлүмәт район һәм ҡала ҡоролтайҙарының Бәйләнештә социаль селтәрендәге аккаунтында (булмаған осраҡта, уны булдырыу мотлаҡ) махсус ҡулланылған хэштегтар #ҡоролтай #курултай #годбашкирскогоязыка #башҡорттелейылы #ҡала(район)исеме #сараның йүнәлеше (темаһы) атамаһы (1-се таблицаның 4-се бағанаһына ярашлы) аша яҡтыртыла. Территориаль ҡоролтайҙарҙың аккаунттарында «Башҡорт теле йылы – 2020» тип аталған айырым бит булдырырға тәҡдим ителә.

## 4. Башҡорт теле йылын үткәреү тәртибе

4.1. Башҡорт теле йылы сиктәрендә муниципаль район һәм ҡала округтарында, Рәсәй Федерацияһы субъекттарының башҡорттар күпләп йәшәгән төбәктәрендә түбәндәге йүнәлештәр буйынса саралар уҙғарырға тәҡдим ителә:

1-се таблица

| **Ай (этап старты)** | **Айҙарҙың тематик йүнәлештәре** | **Тәҡдим ителгән саралар (район һәм ҡалаларҙа тормошҡа ашырыу өсөн)** | **Хэштег** |
|---|---|---|---|
| Ғинуар, 2020 й. (йыл дауамында) | Башҡорт теле – дәүләт теле | Ойоштороу мәсьәләләре: концепцияны, программаларҙы, пландарҙы, положениены раҫлау.<br>Бәйләнештә социаль селтәрендә территориаль ҡоролтайҙарҙың аккаунттарын булдырыу.<br>Аккаунт сиктәрендә башҡорт телен өйрәнеү торошон баһалау буйынса һорау алыу ойоштороу (һорауҙы һәр район үҙ аллы һайлай).<br>Башҡорт телендә йыйылыштар, ултырыштар, сығыштар эстафетаһына старт биреү (район хакимиәтендә, ауыл советтарында).<br>Башҡорт телендә баннерҙар, социаль реклама әҙерләү.<br>БР дәүләт телдәрендә мәғлүмәти алтаҡталарҙы анализлау.<br>Башҡорт телендәге алтаҡталарҙа грамматик хаталарҙы асыҡлау һәм төҙәтеү эшен ойоштороу (хаталар өҫтөндә эш).<br>Территориаль ваҡытлы матбуғатта «Башҡорт теле йылы» рубрикаһын булдырыу һәм алып барыу. | #дәүләт |
| Февраль, 2020 й. (йыл дауамында) | Башҡорт теле – заманса тел | Тел белеүселәр менән социаль селтәрҙәр, скайп аша аралашыу, онлайн-дәрестәр, баттлдар, блогерҙарҙы өйрәтеү.<br>Интернет селтәрендә башҡорт телендә конкурстар, флешмобтар, көнүҙәк темаларға уйындар ойоштороу.<br>Башҡорт телендә видеоканалдар, интернет-контент булдырыу, мәктәп, район кимәлендә балалар өсөн иң яҡшы башҡортса видеоблог конкурсы ойоштороу. | #интерактив |
| Март, 2020 й. (йыл дауамында) | Башҡорт теле – ғаилә теле | «Өлгөлө башҡорт ғаиләһе» район (ҡала) конкурсын ойоштороу. | #ғаилә |
| Апрель, 2020 й. (йыл дауамында) | Башҡорт теле – әсә теле | Саралар 3 кимәлдә үткәрелә:<br>1.Балалар баҡсалары.<br>2.Мәктәптәр.<br>3.Урта махсус белем биреү һәм юғары уҡыу йорттары.<br>- Иң яҡшы ауыл башҡорт балалар баҡсаһы (төркөмө); иң яҡшы ҡала башҡорт балалар баҡсаһы (төркөмө) конкурстары,<br>- Балалар баҡсаларында конкурстар (әкиәт терапияһы). | #әсә |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | | - Мәктәп конкурсы.<br>- Студенттар араһында конкурс (туған телдә имтихан тапшырыу мөмкинлеге (урта махсус белем биреү һәм юғары уҡыу йорттары).<br>- Мәктәпкәсә һәм дөйөм белем биреү учреждениеларында «Беҙ башҡортса һөйләшәбеҙ» акцияһы.<br>- Әҙәби уҡыуҙар, конкурстар, квестар (Бабич, Бикбай, Ғарипов уҡыуҙары һ.б.). | |
| Май, 2020 й. (йыл дауамында) | Башҡорт теле – еңеүселәр теле | - Туған телдә саралар үткәреү, шулай уҡ тематик конкурстар.<br>- Бөйөк Еңеүгә бағышланған саралар.<br>- Яугир-шайморатовсыларҙың иң яҡшы шәжәрәһенә конкурс. | #9май |
| Июнь, 2020 й. (йыл дауамында) | Башҡорт теле – халыҡ теле | Фольклор үҙ эсенә күп төрлө жанрҙарҙы ала: әкиәттәр, мәҡәлдәр, әйтемдәр, йырҙар, йомаҡтар, һанашмаҡтар, һынамыштар һ.б. Фольклорҙы өйрәнеү төбәктә йәшәүсе халыҡтың традициялары, мәҙәниәте, тарихы, тормош-көнкүреше тураһында белешмә бирә. Тел өйрәнеүҙең иң емешле ысулы тип һанала (айырыуса балалар баҡсаларында һәм мәктәптәрҙә).<br>- Төбәк фольклорын өйрәнеү, тыуған яҡты өйрәнеүселәр конкурсы (шул иҫәптән – балалар араһында).<br>- Конкурстар үткәреү, ырыуҙарҙы, шәжәрәләрҙе өйрәнеү.<br>- Халыҡ уйындарын өйрәнеү һәм популярлаштырыу.<br>- Этник спорт төрҙәре буйынса саралар, ярыштар.<br>- Тиҙәйткестәр, йомаҡтар һ.б. һөйләү буйынса конкурстар.<br>- Китапханасылар өсөн семинарҙар, китап уҡыусылар менән осрашыуҙар.<br>- Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайының 25 йыллығына арналған саралар. | #фольклор |
| Июль 2020 й. (йыл дауамында) | Башҡорт теле – дуҫлыҡ теле | Туған тел үҫеше өсөн мауыҡтырғыс даирә булдырыу. Башҡорт телен белеү файҙалы булырға тейеш.<br>- Дәүләт телдәрендә иғландар, документация алып барыу.<br>- Мәктәп уҡыусылары өсөн йәйге тел курстары.<br>- Башҡортса йәйге лагерҙар.<br>- Мәктәптәрҙә кисәләр.<br>- Тематик экскурсиялар, шул иҫәптән РФ субъекттарынан килгән уҡыусылар өсөн (дуҫ | #дуҫлыҡ |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | | районлар ҡатнашлығында). | |
| Август 2020 й. (йыл дауамында) | Башҡорт теле – юлдаш теле | - Туған телдә телетапшырыуҙар һәм фильмдар ҡарау.<br>- Радиотапшырыуҙар, подкастар, аудиокитаптар (таратыу, презентация).<br>- Билдәле шәхестәр, ижади төркөмдәр ҡатнашлығында телекиноуҙыштар ойоштороу. | #юлдаш |
| Сентябрь 2020 й. (йыл дауамында) | Башҡорт теле – ижад теле | - Ижади түңәрәктәр аша телде өйрәнеү.<br>- Мәҙәнипоходтар ойоштороу.<br>- Һәүәҫкәр театрҙар (түңәрәктәр) булдырыу.<br>- Спектаклдәр трансляцияһы.<br>- Балалар өсөн йәкшәмбе мәктәптәре (клубтар) асыу.<br>- Өлкәндәр өсөн киске мәктәптәр (клубтар) асыу.<br>- Шағирҙар, яҙыусылар менән осрашыуҙар, әҙәби кисәләр ойоштороу.<br>- Ваҡытлы матбуғатҡа яҙылыу кампанияһы. | #ижад |
| Октябрь 2020 й. (йыл дауамында) | Башҡорт теле – тарих теле | - Тел һәм тарих.<br>- Тыуған яҡты өйрәнеү музейҙарында дәрестәр, экскурсиялар ойоштороу һәм үткәреү.<br>- «Мин – төнъяҡ амуры вариҫы» проекты (конкурсында) ҡатнашыу.<br>- Райондарҙа билдәле шәхестәрҙең исемен мәңгеләштереү.<br>- Әҙәби кисәләр. | #тарих |
| Ноябрь 2020 й. (йыл дауамында) | Башҡорт теле – моңло тел | Музыка – ул тел атмосфераһына сумыу сараһы, телде төрлө урында өйрәнеү мөмкинлеге бирә.<br>- Район кимәлендә балалар йырҙары интернет-конкурстары.<br>- «Йырлы ауыл» сиктәрендә конкурс.<br>- «Минең тыуған яғымдың иң матур бишек йырҙары» конкурсы.<br>- Ижади конкурстар («Һәүәҫкәр балалар композиторы», «Һәүәҫкәр композитор»).<br>- Мәктәпкәсә йәштәге балалар араһында район кимәлендә музыкаль конкурс («Тамыр» телеканалының «Сулпылар» тапшырыуы сиктәрендә йәки үҙ конкурстары). | #музыка |
| Декабрь 2020 й. (йыл дауамында) | Башҡорт теле – рух теле | Йомғаҡ яһау | #рух |

4.2. Муниципаль район һәм ҡала округтары йүнәлештәр һәм темалар йөкмәткеһен һаҡлап, саралар форматын үҙгәртергә, үҙ проекттарын ойоштороорға хоҡуҡлы. Тематик йүнәлештәр буйынса сараларҙы 2020 йыл дауамында үткәрергә тәҡдим ителә.

4.3. Башҡорт теле йылын ойоштороу буйынса муниципаль район һәм ҡала округтарының Положениеһына ярашлы, муниципаль район һәм ҡала округтары районда (ҡалала) Башҡорт теле йылына үҙ аллы йомғаҡ яһай, район конкурстарында, сараларында әүҙем ҡатнашыусыларҙы һәм еңеүселәрҙе билдәләй.

4.4. Республика һәм төбәк-ара кимәлдәге саралар айырым Положениеларға ярашлы үткәрелә.

## 5. Башҡорт теле йылын һөҙөмтәле үткәреү буйынса муниципаль район һәм ҡала округтары хакимиәттәре, территориаль ҡоролтайҙар эшмәкәрлеген баһалау.

5.1. Муниципаль район һәм ҡала округтары хакимиәттәренең, территориаль ҡоролтайҙарҙың Башҡорт теле йылы сиктәрендә эшмәкәрлеге, сараларҙы ойоштороу һөҙөмтәһе район/ҡала ҡоролтайҙарының Бәйләнештә селтәрендә аккаунттарында ҡуйылған мәғлүмәткә ярашлы ғына баһалана.

5.2. Һәр сара социаль селтәрҙәге аккаунтта фото һәм видеоматериалдар аша дәлилләнергә тейеш.

5.3. Һәр яҙмала сараның ваҡыты, үткәрелгән урыны, географияһы, ҡатнашыусылар һаны, әгәр булһа – сара тураһында положение йәки документ тураһында мәғлүмәт ҡуйылырға тейеш.

5.4. Киң мәғлүмәт сараларында аныҡ районда (ҡалала) үткән сара тураһында донъя күргән мәғлүмәт тә (репост, текстты ҡуйыу һ.б.) ҡоролтай аккаунтында ҡуйылған һәм айырым хэштегтар менән билдәләнгән осраҡта ғына иҫәпкә алына.

5.5. Баһалау өсөн «Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы (конгресы)» йәмәғәт ойошмаларының халыҡ-ара берлеге Башҡарма комитетының мәғариф, фән һәм башҡорт телен һәм әҙәбиәтен үҫтереү комиссияһы ҡарамағындағы жюри яуаплы. Жюри составы Комисссия тарафынан раҫлана.

5.6. Баһа түбәндәге талаптар нигеҙендә ҡуйыла:

2-се таблица

| № | Критерийҙар | Баһалау сиктәре | Баһалау тәртибе |
|---|---|---|---|
| 1. | Бәйләнештә социаль селтәрендә территориаль ҡоролтайҙарҙың үҙ аккаунты булыуы | 0 балдан 5 балға тиклем | Аккаунт булдырыу айы:<br>ғинуар (йәки быға тиклем дә бар) – 5 балл<br>февраль – 4,<br>апрель -2,<br>май- 1,<br>июнь йә һуңыраҡ – 0 балл. |
| 2. | Бәйләнештә социаль селтәрендә территориаль ҡоролтай төркөмөндә Башҡорт теле йылына арналған айырым бит | 0/1 | Бар- 1.<br>Юҡ – 0. |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | булыуы | | |
| 3. | Бәйләнештә социаль селтәрендә территориаль ҡоролтай төркөмөндә һораулама ойоштороу (ғинуар һәм декабрь айҙарында).<br>Мәçәлән:<br>Бөгөн милли ихтыяжығыҙҙы тормошҡа ашырыу мөмкинлегенән ҡәнәғәтһегеҙме (телде өйрәнеү, мәҙәниәт һ.б.) | 0 балдан 7 балға тиклем | Ғинуар айында һораулама – 1.<br>Һораулама декабрь айында – 1.<br><br>Күрһәткестәрҙең яҡшырыуы-5,<br>- насарайыуы – 0,<br>- үҙгәрешһеҙ -1.<br><br>Юҡ – 0 |
| 4. | Хэштегтарҙы дөрөç ҡулланыу | 0/1 | Йыл дауамындағы баçмалар баһалана |
| 5. | Тематик хэштег һәм йүнәлештәр буйынса саралар һаны | Йыл һөҙөмтәләре буйынса сараларҙың дөйөм һаны | Ауыл кимәлендә 1 сара – 1 балл.<br>Ауыл советы кимәлендә 1 сара – 2 балл.<br>Район/ҡала кимәлендә 1 сара – 3 балл.<br>Район-ара кимәлдә 1 сара – 4 балл.<br>Район ойошторған республика кимәлендә 1 сара – 5 балл. |
| 6. | Сараларҙа ҡатнашыусыларҙың һаны (халыҡты йәлеп итеү буйынса, аккаунттағы баçмалар/документтар нигеҙендә) | 0 балдан 5 балға тиклем | 10 % кәмерәк - 0 балл.<br>10% - 1 балл.<br>30 % -2 балл.<br>40% -3 балл.<br>50 % - 4 балл.<br>70% һәм юғарыраҡ – 5 балл. |
| 7. | Урындарҙа терминология комиссиялары эшен ойоштороу.<br>Территориаль ҡоролтайҙарҙың социаль селтәрҙәге аккаунтында айырым фотоальбом булдырыу тәҡдим ителә. | 0/1<br>Эш сифатын баһалау (ҡуйылған фотолар нигеҙендә) – 5 балға тиклем | Бар - 1,<br>Юҡ – 0,<br>Эш сифаты – 5 балға тиклем |
| 8. | Район һәм ҡала мәктәптәрендә башҡорт телен туған тел булараҡ һайлаған балалар һаны артыуы*. | 0 балдан 3 балға тиклем | Үçеше – 3 балл.<br>Үҙгәрешһеҙ – 1 балл.<br>Кәмеүе – 0 балл. |
| 9. | Дөйөм белем биреү ойошмаларында башҡорт телен | 0 балдан 3 балға тиклем | Үçеше – 3 балл,<br>Үҙгәрешһеҙ – 1 балл, |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | дәүләт теле булараҡ уҡыған балаларҙың һаны* | | Кәмеүе – 0 балл |
| 10. | Территориаль ҡоролтайҙар янында ата-әсәләр комиссиялары эшен ойоштороу (эш сифаты баһалана) | 0/5 | Һәр район/ҡала шәхсән баһалана |
| 11. | Дәүләт башҡорт телендә кәңәшмәләр үткәреү (район кимәлендә, ауыл советы кимәлендә, сығыштар ғына) | Иң юғары балл - 10 | Һәр район/ҡала шәхсән баһалана |
| 12. | Мәктәпкәсә дөйөм белем биреү ойошмаларында башҡорт телендә уҡытыу һәм тәрбиә биреү буйынса яңы төркөмдәр иҫәбе буйынса* | 1 төркөм – 10 балл<br>1 балалар баҡсаһы – 50 балл | |
| 13. | Социаль селтәрҙәрҙә территориаль ҡоролтайҙарҙың аккаунтарында теркәлгән ҡатнашыусылар һаны (аккаунттарҙа теркәлгән ҡатнашыусыларға социаль селтәрҙәрҙә БДБҠ төркөмдәренә инеүҙәрен тәҡдим итергә) https://vk.com/kurultaibashkir @kurultaibashkir Инстаграм https://www.facebook.com/groups/kurultaibashkir | 0 балдан 20 балға тиклем | 100-ән кәм – 0 балл<br>500-ҙән артыҡ – 1 балл<br>1000-дән артыҡ – 10 балл<br>2000-дән артыҡ – 15 балл<br>5000-дән артыҡ – 20 балл |
| 14. | Аккаунттың әүҙемлеге | 0 балдан 5 балға тиклем | Аккаунт статистикаһына ярашлы шәхсән баһалана |
| 15. | Тыуған яҡты өйрәнеүселәр конкурсын үткәреү (ҡатнашыусыларҙың эштәре менән, документаль рәүештә раҫлана) | 0 балдан 20 балға тиклем | Ебәрелгән документтар һәм отчеттарға ярашлы шәхсән баһалана |
| 16. | Мәктәп уҡыусылары араһында ырыу/шәжәрә өйрәнеү буйынса конкурс үткәреү | 0 балдан 20 балға тиклем | Ебәрелгән документтар һәм отчеттарға ярашлы шәхсән баһалана |
| 17. | Башҡорт телендә үҙенсәлекле интернет-контент булдырыу | 0 балдан 10 балға тиклем | Аккаунттағы һылтанмаларға ярашлы шәхсән баһалана |
| 18. | Район кимәлендә иң яҡшы ауыл балалар баҡсаһы (төркөмө) конкурсы үткәреү (иң яҡшы ҡала | 0 балдан 20 балға тиклем | Ебәрелгән документтар һәм отчеттарға ярашлы шәхсән баһалана |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | башҡорт балалар баҡсаһы (төркөмө) | | |
| 19. | Иң яҡшы яугир-шайморатовсылар шәжәрәһе конкурсын үткәреү | 0/1 | Бар – 1,<br>Юҡ - 0 |
| 20. | Башҡорт телен өйрәнеү буйынса йәкшәмбе курстары (клубтары) ойоштороу | | Юҡ – 0<br>Бар – 1 балл<br>(һәр группа, курс өсөн – 10 балл) |
| 21. | Башҡорт телен өйрәнеү буйынса мәктәп уҡыусылары өсөн йәйге курстар (түңәрәктәр) ойоштороу | | Юҡ – 0<br>Бар – 1 балл<br>(һәр группа, курс өсөн – 10 балл) |
| 22. | Ауыл һәм ҡалаларҙа һәүәҫкәр театрҙар ойоштороу (балалар һәм ололар өсөн) | 1 театр (түңәрәк) – 5 балл.<br>1 постановка - 1 балл. | |
| 23. | «Мин – төнъяҡ амуры вариҫы» проектында (конкурсында) ҡатнашыу | 1 ҡатнашыусы - 1 балл | |
| 24. | Музыкаль (интернет) конкурстар ойоштороу | 0 балдан 5 балға тиклем | Ауыл кимәлендә 1 сара – 1 балл.<br>Ауыл советы кимәлендә 1 сара – 2 балл.<br>Район/ҡала кимәлендә 1 сара – 3 балл.<br>Район-ара кимәлдә 1 сара – 4 балл.<br>Район ойошторған республика кимәлендә 1 сара – 5 балл. |
| 25. | Уникаль тәжрибә | | Ауыл кимәлендә 1 сара – 1 балл.<br>Ауыл советы кимәлендә 1 сара – 2 балл.<br>Район/ҡала кимәлендә 1 сара – 3 балл.<br>Район-ара кимәлдә 1 сара – 4 балл.<br>Район ойошторған республика кимәлендә 1 сара – 5 балл. |

| | | | |
|---|---|---|---|
| 26. | Йыл дауамында бөтә тематик йүнәлештәр буйынса һөҙөмтәле саралар үткәреү | 0 балдан 10 балға тиклем | Ебәрелгән документтар һәм отчеттарға ярашлы шәхсән баһалана |
| | **- БР Мәғариф министрлығының статистик мәғлүмәте нигеҙендә сағыштырмаса (декабрь, 2019/ноябрь, 2020) баһалана* | | |

5.7. Ойоштороусылар баһаламаға өсөн өҫтәмә талаптар индерергә хоҡуҡлы
5.8. Еңеүселәр 2020 йылдың 10 декабренә тиклем билдәләнергә тейеш.
5.9. Башҡорт теле йылына 2020 йылдың 14 декабрендә йомғаҡ яһала.
5.10. Башҡорт теле йылының берҙәм логотибын ҡулланыу тәҡдим ителә (ҡушымтала).

## 6. Башҡорт теле йылын йомғаҡлау өсөн номинациялар

6.1. Жюри
- муниципаль район округтары хакимиәттәре араһында;
- ҡала округтары хакимиәттәре араһында;
- район башҡорттары ҡоролтайҙары араһында;
- ҡала башҡорттары ҡоролтайҙары араһында;
- Рәсәй Федерацияһы субъекттары (ҡалалары) башҡорт йәмәғәт ойошмалары араһында;
- журналистар араһында

Башҡорт теле йылының тематик йүнәлештәренә ярашлы номинациялар буйынса еңеүселәрҙе билдәләй.
6.2. Жюри өҫтәмә номинациялар индерергә хоҡуҡлы.